# Дүртөйлө ҡалаһы
# Назар Нәжми исемендәге
# башҡорт гимназияһы

Камалова Руфина Зәки ҡыҙы

# “Төньяҡ – көнбайыш диалект шарттарында уҡыусыларҙың лингвистик һәм коммуникатив компетенцияларын үҫтереү”



ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ ДИАЛЕКТ ШАРТТАРЫНДА БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУ БУЙЫНСА ӨҪТӘМӘ ҠУЛЛАНМА
5-СЕ КЛАСС
ӨФӨ 2019
БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН КЛАСТАН ТЫШ УҠЫУ КИТАБЫ
РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ ТАРИХ, ТЕЛ һәм ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ
ДҮРТӨЙЛӨ БАШҠОРТТАРЫ
ДЕЛОВАЯ династия
ӨФӨ – 2013
Ижевск
Екатеринбург
Исеть
Кама
Белая
Ик
Уфа
Ай
Юрюзань
УФА
Инзер
Дёма
Уршак
Ашкадар
Белая
Урал
Уй
Ток
Бол. Уран
Бол. Ик
Сакмара
Оренбург
Урал
ДИАЛЕКТЫ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА
Южный диалект
Восточный диалект
Северо-западный диалект

# Лексика

***Күнегеү***. *Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе өҫтәп күсереп алығыҙ. Һығымта яһағыҙ. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп әйтегеҙ.*

1. *(з, ҙ)* .авод, .ур, .аман, .ат, бы.ау, ауы., ауа. ;
2. *(ч, с)* .әк-.әк, .әләм, .әй, ки.ә, аға., а.ыш, Яр .аллы *(ҡала)*;
3. *(с, ҫ)* ке.ә, ке.әл, бала., дәре., у.ал, и.ем.
4. *(с, һ)* .абый, .абын, .өйөү, .әғәт, .умка, .ыйыр.
5. *(ж, й)* мөр.ә, .ыр, .ылы, мы.ыҡ *(сифат)*.
6. *(п, б)* .ирсәткә, .атша, .илмән, ә.әй, .инжәк, .ыш-.ыш, .ауза *(рус)*.
7. *(ф,п)* ту.раҡ, кер.ек, .әрҙә, я.раҡ, .ән.

# Аудиялау

***Күнегеү**. “Коштар касан кайта?” тигән аудиояҙманы тыңлағыҙ һәм түбәндәге эштәрҙе башҡарығыҙ:*

1. *Терәк һүҙҙәрҙе әйтегеҙ.*
2. *Кыҫкаса йөкмәткеһен һөйләгеҙ.*
3. *Бирелгән раҫлауҙы уҡығыҙ һәм был раҫлау дөрөҫмө, яуап бирегеҙ.*

- 1. Коштарҙы көҙ хәбәрселәре тип атайҙар.
- 2. Коштарҙың килеүе апрель, май, июнь айҙарына һуҙыла.
- 3. Март башында сыйырсыҡтар ҡайта.
- 4. 6 майҙа ҡарлуғастар килә.

## Уҡыу

***Күнегеү.*** *Тексты уҡығыҙ. Төшөп ҡалған ялғауҙарҙы тултырып яҙып, тексты дәфтәрегеҙгә күсерегеҙ. Түбәндә бирелгән раҫлау дөрөҫмө? Дөрөҫ булмаһа, төҙәтеп әйтегеҙ.*

Минең көнөм.

Мин иртәнсәк сәғәт 7-... торам. Сәғәт 8-... яртыла иртәнге аш ашайым. Унан мәктәпкә барам. Сәғәт 2-... мәктәптән ҡайтам, 4-... алып 6-... тиклем түңәрәктә шөғөлләнәм. 7-... киске аш ашайым. Китап уҡыйым, телевизор ҡарайым. 11-... яртыла йоҡларға ятам.

Түбәндә бирелгән раҫлау дөрөҫмө? Дөрөҫ булмаһа, төҙәтеп әйтегеҙ.

1. Мин иртәнсәк сәғәт 7-лә торам.
2. 6-ла киске аш ашайым.
3. 11-ҙә йоҡларға ятам.

# Һөйләү

***Күнегеү**. Һүрәттән эш-хәлдең үтәлеү ваҡытын белдергән һүҙҙәрҙе (рәүештәрҙе) табып әйтегеҙ. Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙәге ҡылымдарҙы тейешле формала ҡуйып, үҙегеҙҙең бер көнөгөҙ тураһында һөйләгеҙ.*



# Тиҙәйткестәр

***Әә***

-рә, -рә, -рә,
Әнисә шәп йүгерә.

***Өө***

-ңө, -ңө, -ңө,
Урманда айыу өңө.

***Үү***

Кәкүк, кәкүк, саҡыра кәкүк,
-рүк, -рүк, рүк, ҡысҡырма берүк.

***Ғғ***

-ға, -ға,-ға, -ға, -ға,-ға,
Ҡаҙҙар китте йылғаға.

***Ҙҙ***

Беҙ, беҙ, беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек.

***Ҡҡ***

Ҡара ҡарға ҡарҙан бара,
Ҡанаттарын ҡаға - ҡаға.

***Һһ***

Һаҡмарҙа һары һандуғас һайрай.

*Күнегеү.* Таблицаны тултырығыҙ. Диалект һүҙҙәрен әҙәби тел менән сағыштырығыҙ. Һөйләмдәр төҙөп әйтегеҙ.

| **Төрлө һөйләштә** | **Әҙәби телдә** |
|---|---|
| инәй, инәкәй, әни, әнкәй, әннә | |
| ҡартый, нәнәй, дәү әни | |
| мынса, мунча | |
| сөгөнтөр, чөгөндөр | |
| сискә, чәчкә, чәчәк | |
| пыйма, пима | |
| ҡолҡай, көлкәй | |

| **Шулай әйтелә һәм яҙыла** | |
|---|---|
| Салауат | Салауат |
| изгелек | изгелек |
| самауыр | самауыр |
| яуызлыҡ | яуызлыҡ |

- **Е**

Кем, еле, элек(тр)

- **О**

Он, тот, болото

- **Ы**

Был, -ты, кайтты

***Күп белдереүгә ҡарағанда, әҙ белдереп эҙләнеү орлоғон һалыу һәм эҙләү юлдарын табырға өйрәтеү - мөғәллим бирә ала торған хеҙмәттәттәрҙең иң ҙурыһы.***

***Ғ. Ибраһимов.***

# Исемдәрҙең дөрөҫ әйтелеше

| Ерле һөйләштә | Әҙәби телдә | Һығымта | |
|---|---|---|---|
| | | һүҙ башында | һүҙ аҙағында |
| чәчкә, чаңғы, көч | | | |
| сорау, сандыҡ | | | |
| ырыс, ылыс | | | |
| яз, ҡыз | | | |
| жиләк, жимеш | | | |

# Ҡылымдарҙың дөрөҫ әйтелеше

| Ерле һөйләштә | Әҙәби телдә | Һығымта | |
|---|---|---|---|
| | | **һүҙ башында** | **һүҙ аҙағында** |
| чыҡ, чәч, ач, эч | сыҡ, сәс, ас, эс | ***ч*** өнө ***с*** өнөнә үҙгәрә | |
| сайла, сикер | һайла, һикер | ***с*** өнө ***һ*** өнөнә үҙгәрә | |
| үс, кис | үҫ, киҫ | | ***с*** өнө ***ҫ*** өнөнә үҙгәрә |
| яз, түз | яҙ, түҙ | | ***з*** өнө ***ҙ*** өнөнә үҙгәрә |
| жәй, жый | йәй, йый | ***ж*** өнө ***й*** өнөнә үҙгәрә | |
| житте, жибәр | етте, ебәр | ***Жи*** дифтонгы ***йе*** дифтонгыһына үҙгәрә | |

# Исемдәрҙә күплек ялғауҙарының дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы

| Исемдәрҙең аҙағында килә торған хәрефтәр | Күплек ялғауының варианттары | |
|---|---|---|
| | һөйләштә | әҙәби телдә |
| а,ә,о,ө,ы,е,я | -лар, -ләр | -лар , -ләр |
| л,***м,н,ң***,з,ж | ***-нар, -нәр*** | ~~-нар~~, ~~-нәр~~<br>-дар, -дәр |
| б,в,г,д,к,ҡ,п,с,ҫ,т,ф,х,һ,ц,ч,ш,щ | -лар, -ләр | -тар, -тәр |
| ҙ,й,р,у,ү,и,ю | -лар, -ләр | -ҙар, -ҙәр |

# Ҡылымдарҙың үткән заман ялғауының дөрөҫ яҙылышы

| Ҡылым аҙағында килә торған хәрефтәр | Үткән заман ялғауының варианттары | |
|---|---|---|
| | ерле һөйләштә | әҙәби телдә |
| а, ә | - ды, - де | -ны, -не |
| л, м, н | - ды, - де; (- до, - дө) | |
| к, ҡ, п, с, ҫ, т, | - ты, - те; (- то, - тө) | |
| ҙ, й, р, у | - ды, - де | - ҙы, - ҙе; (- ҙо, - ҙө) |

# Исемдәрҙә күплек, килеш, ҡылымдарҙың үткән заманы ялғауҙарының дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы

| Исемдәрҙең аҙағында килә торған хәрефтәр | Күплек ялғауының варианттары | | Килештәр | Килештәрҙең үҙгәреше | | Күплектә | Ҡылымдарҙың үткән заманы | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | һөйләштә | әҙәби телдә | | һөйләштә | әҙәби телдә | | һөйләштә | әҙәби телдә |
| а,ә,о,ө,ы,е,я | -лар , -ләр | | Төп | бала | | | | |
| | | | Эйәлек | бала-ның | | | | |
| | | | Төбәү | бала-ға | | | | |
| | | | Төшөм | бала-ны | | | | |
| | | | Урын-ваҡыт | бала-да | бала-ла | бала-ла(р) | уҡы-ҙы | уҡы-ны |
| | | | Сығанаҡ | бала-дан | бала-нан | | | |
| л,м,н,ң,з,ж | -нар, -нәр | ~~-нар~~, ~~-нәр~~ -дар, -дәр | Төп | урман | | | | |
| | | | Эйәлек | урман-ның | урман-дың | урман-дар | мен-де | |
| | | | Төбәү | урман-ға | | | | |
| | | | Төшөм | урман-ны | урман-ды | | | |
| | | | Урын-ваҡыт | урманда | | | | |
| | | | Сығанаҡ | урман-нан | урман-дан | | | |
| б,в,г,д,к,ҡ,п, с,ҫ,т,ф,х,һ,ц, ч,ш,щ | -лар, -ләр | -тар, -тәр | Төп | китап | | китап-та(р) | кит-те | |
| | | | Эйәлек | китап-ның | китап-тың | | | |
| | | | Төбәү | китап-ка | | | | |
| | | | Төшөм | китап-ны | китап-ты | | | |
| | | | Урын-ваҡыт | китап-та | | | | |
| | | | Сығанаҡ | китап-тан | | | | |
| ҙ,й,р,у,ү,и,ю | | -ҙар, -ҙәр | Төп | тау | | тау-ҙа(р) | күр-де | күр-ҙе |
| | | | Эйәлек | тау-ның | тау-ҙың | | | |
| | | | Төбәү | тау-ға | | | | |
| | | | Төшөм | тау-ны | тау-ҙы | | | |

# Һүҙлек

| Башкорт телендә | Төньяк-көнбайыш диалектында | Татар телендә |
|---|---|---|
| арғымаҡ | арғымаҡ | аргамак |
| бәшмәк | мәшкә | гөмбә |
| бәпес | бәбәй | сабый |
| күнәк, биҙрә | бидрә | чиләк |
| ҡарағат | ҡарағат | карлыган |
| миңә | миңә, миңәргә | миңа |
| сәскә | чәчкә | чәчәк |
| һөйләй | сүләй | сөйләй |
| һыу | сыу | су |
| әсәй | әней | әни |

- әҙәби телдә асыҡ орфоэпия менән һөйләү, һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе әҙәби нормаларға ярашлы әйтеү, үрнәк биреү;
- хаталарҙы төҙәтә, иҫкәртә барыу;
- өн-хәрефтәрҙе дөрөҫ әйтелеш һәм яҙылыш менән сағыштырып ҡарау;
- һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар өҫтәп уҡытыу йә әйттереү;
- бер-береһенең телмәрҙәрен иғтибар менән тыңлау һәм хаталарҙы төҙәтеү.

Без үзебез – башҡортлар,
Күп ырыуға баш йортлар.
Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,
Беҙҙә һәр бер ашлыҡлар.

***(Шәйехзада Бабич)***

Сыу буйында үскән талым,
Ҡырҡып алсаң бит талларың,
Сарыҡҡан батыр ҡаннары-
Башҡорт ҡаны – милли жаным.

***(Назар Нәжми)***

Һәр технология – ул педагогик сәнғәт әҫәре. Ә һәр сәнғәт әҫәре, кем уны ижад итә, шуға бәйле. Һәр дәрес уҡытыусы тарафынан балаларға бүләк кеүек уйланылған булырға тейеш.

Әйҙәгеҙ, бындай бүләктәрҙе балаларға булдыра алған тиклем күберәк бүләк итәйек!